*Зиннур УРАҠСИН,*
*Башкортостан Республикаһы*
*Фәндәр академияһы академигы*

# Һүҙлектәр — тел хазинаһы

Һүҙлектәр беҙ ҡулланған һүҙҙәр, уларҙың мәғәнәһе, яҙылышы, килеп сығышы һәм башҡа билдәләре тураһында белешмә бирә. Заман талабына ярашлы төҙөлөп, ваҡыт үтеү менән иҫкерһәләр ҙә, һәр һүҙлек халыҡ, уның теле, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәте тураһында мәғлүмәт һаҡлауы менән ҡәҙерле.

Башҡорт һүҙҙәре иң тәүләп мәшһүр төркиәтсе Мәхмүт Ҡашғариҙың ”Төрки телдәр һүҙлеге”нә (”Диуану лөғәт әт-төрк”) инеп ҡалған. XI быуатта төҙөлгән был дүрт томлыҡ һүҙлек беҙҙең заманда төрөк, үзбәк телдәренә тәржемә ителеп, донъя күрҙе. Унда егерменән ашыу төрки халыҡтар теле, фольклоры, шиғриәте, этнонимияһы, этнографияһы, диалектологияһы, генеалогияһы буйынса мәғлүмәттәр тупланған.

Башҡорт теленең үҙенең генә һүҙҙәренән торған тәүге һүҙлектәр XVIII быуаттың аҙағында төҙөлә. Улар 200-300 һүҙҙе генә үҙ эсенә алған һәм башҡорт теле тураһында тәүге мәғлүмәт биреү маҡсатынан эшләнгән. Октябрь революцияһына тиклем туған телебеҙҙең тиҫтәгә яҡын һүҙлеге донъя күргән (күпселеге урыҫса-башҡортса).

Башҡорт лексикографияһы (һүҙлектәр төҙөү теорияһы һәм практикаһы фәне) күтәрелеше ысын мәғәнәһендә революциянан һуң, башҡорт теле дәүләт теле статусын алғас, яңы әҙәби тел формалашҡас башлана. Ошо ваҡыт эсендә алтмышлап төрлө һүҙлек донъя күрҙе.

1999 йылда ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында” закон һәм уны ғәмәлләштереү буйынса дәүләт программаһы ҡабул ителде. Айырым ҙур күләмле һүҙлектәр өсөн дәүләт ҡаҙнаһынан аҡса ла бүленде. Һүҙлектәр төҙөү Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты башҡарған төп академик темаларҙың береһенә әйләнде. Һүҙлектәр һаны ғына түгел, типтары (йәғни төрҙәре) күбәйҙе, эшләнеш сифаты, уларҙың ғилми кимәле күтәрелде.

Һүҙлектәр төҙөү өсөн Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ныҡлы нигеҙ булдырылған. Бында миллиондан артыҡ лексик картотека тупланды, ике томлыҡ аңлатмалы һүҙлек һәм тулыраҡ күләмле башҡортса-урыҫса һүҙлегебеҙ бар. Компьютер технологияһы лабораторияһы эшләй һәм һүҙлек төҙөүҙә киң ҡулланыла.

Һүҙлектәр төҙөүҙең теоретик яҡтары ла эшләнелә бара. Һәр һүҙлекте башлар алдынан уның принциптары билдәләнә, ул коллективта ентекләп тикшерелә. Ныҡ алға китеш терминология өлкәһендә булды. Бында элек

эшләнгән йүнәлештәр буйынса өр-яңы һүҙлектәр төҙөлөп, етерлек тираж менән баҫтырылды. Миҫал өсөн ”Урыҫса-башҡортса аңлатмалы һүҙлек”те (Өфө, 2003) генә алайыҡ. Ул урыҫсаға ла тәржемә ителгән. Мөхәррирҙәре М.В. Зәйнуллин, З.F. Ураҡсин, З.И. Еникеев. Бында 12 меңдән ашыу һүҙгә башҡортса тәржемә һәм киң аңлатмалар бирелгән. Һүҙлек ысын мәғәнәһендә энциклопедик йүнәлешле. Уны әҙерләүҙә һәм баҫтырып сығарыуҙа Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай хеҙмәткәрҙәре ҙур көс һалды. Ошондай типтағы һүҙлек 2004—2005 йылдарҙа иҡтисад терминдары өлкәһендә башҡарылды, был егерме табаҡтан ашыу күләмле һүҙлек тә быйыл донъя күрергә тейеш.

Башҡорт лексикографияһында яңы йүнәлеш — һүҙлек төҙөү эшендә компьютер технологияһын ҡулланыу (был йүнәлеш менән З.Ә. Сиразетдинов етәкселек итә). Уның асылы нимәлә һуң? Берәй йүнәлеш буйынса тотош текстар компьютер аша үткәрелә һәм ошо текстарҙа һүҙҙәрҙең нисә тапҡыр ҡулланылышы билдәләнә, шул нигеҙҙә йышлыҡ һүҙлеге төҙөлә. Унда һүҙҙәр теге йәки был текста ҡулланыу йышлығы буйынса урынлаштырыла, йәғни иң күп ҡулланылған һүҙ алда, иң әҙ ҡулланылғаны иң аҙаҡта тора. Ошондай типтағы өс һүҙлек донъя күрҙе лә инде: Дауыт Юлтый әҫәрҙәренең йышлыҡ һүҙлеге. Өфө, 1995; Башҡорт теленең йышлыҡ һүҙлеге: Фәнни әҙәбиәт. Өфө, 1997; Публицистика. Өфө, 2001. Нәфис әҙәбиәт буйынса ла йышлыҡ һүҙлеге әҙерләнде. Был һүҙлектәргә, һис шикһеҙ, тулыраҡ лингвистик аңлатмалар кәрәклеге күренеп тора. Ошо ысул менән яҙыусылар әҫәрҙәре һүҙлектәрен дә эшләп булыр ине. Әйтәйек, Мостай Кәрим әҫәрҙәренең һүҙлеге, Зәйнәб Биишева әҫәрҙәренең һүҙлеге һ.б. Уларҙың эшләнеше урыҫ ғалимдары сығарған ”Словарь языка Пушкина” (М, 1956, 4 томда) кеүегерәк булһын ине.

Терминологик һүҙлектәр төҙөүҙә лә ныҡ ҡына алға китеш һиҙелә. Бығаса бөтөнләй һүҙлектәр төҙөлмәгән өлкәләр буйынса белешмәләр булдырылды. Архитектура-төҙөлөш терминдары (төҙөүселәре: З.F.Ураҡсин, З.Ә.Сиразитдинов), этнографик һәм этнокультур төшөнсәләр һүҙлектәре (төҙөүселәре: М.И.Баһауетдинова, Р.Х.Һаҙыева), һынлы сәнғәт һүҙлеге, (Фәтихов Р.Р.), эквивалентһыҙ лексика һүҙлеге (Самситова Л.Х.) һәм башҡалар.

Терминдар һүҙлектәре хәҙер тәржемәләр биреү менән генә сикләнмәй, башҡортса өлөшөндә терминға ҡыҫҡаса аңлатмалар ҙа килтерелә. Был бик мөһим эш. Ҡулланыусы термин аңлатҡан төшөнсәгә лә эйә була.

Һуңғы йылдарҙа күп телле һүҙлектәр (өс телдән ете телгә тиклем) донъя күрҙе. Бындай тәжрибә Екатерина II заманында уҡ ҡулланылған. Ләкин ул төҙөткән һүҙлектә 300-ләп кенә һүҙ төрлө телдәрҙә бирелгән. Яңы һүҙлектәрҙән Т.М.Fарипов башҡарған ”Семиречие Башкортостана: Семиязычный словарь (русско-татарско-турецко-арабско-персидско-венгерский)” (Уфа, 1998) исемле һүҙлекте күрһәтергә мөмкин. Бынан тыш, С.А.Fәлләмовтың ”Курд-башҡорт-инглиз-рус телдәре һүҙлеге”н, М.А. Хәсәнов, А.М.Хәсәновтарҙың инглизсә-башҡортса-урыҫса һүҙлеген (Уфа, 1997) һәм башҡаларҙы билдәләп үтергә мөмкин.

Һүҙлектәрҙең яңы типтарына когнитив һәм ситуатив һүҙлектәрҙе индерергә була. Бындай төр һүҙлектәр БДУ профессоры Т.Ә.Килдебәкова һәм уның уҡыусылары тарафынан төҙөлдө. Уларҙа һүҙҙәрҙе бер ҙур төшөнсә тирәһенә туплап, һәр төрлө мәғәнәләрен, семантик бәйләнештәрен асыу маҡсаты ҡуйыла. Минең уйымса, был төр һүҙлектәр эштә ҡулланыу өсөн бик уңайлы түгел. Уларҙы, беренсенән, күләмдәре буйынса ҙурыраҡ итергә (бер нисә төшөнсәне берләштерергә), икенсенән, биреү тәртибе (эске төҙөлөшө) тураһында уйларға кәрәк.

Мәктәп өсөн төҙөлгән ҡайһы бер һүҙлектәрҙә лә камил принциптарға таяныу етешмәй. Беҙҙә әле, мәҫәлән, "һүҙлек минимумы" тигән талап мәктәптәргә барып етмәгән. Уҡыусыларҙың һүҙлек запасын баһалағанда субъективлыҡ өҫтөнлөк итә.

Уҡыусылар өсөн төҙөлгән мәҡәлдәр, әйтемдәр һүҙлектәрендә лә осраҡлыҡ күренеше ярылып ята. Уҡыусының белем кимәле, һүҙлектең кемгә тәғәйенләнеше иҫәпкә алынып етмәй. Хәҙер башҡорт телен дәүләт теле булараҡ урыҫ һәм башҡа милләт балалары ла өйрәнә. Улар өсөн башҡорт теле буйынса минимум һүҙлектәр эшләнмәгән. Улар ғилми нигеҙгә таянып төҙөлөргә тейеш. Башҡорт лексикографияһының хәҙерге кимәле шуны талап итә.

Түбәндә беҙ 1998 йылдан бирле сыҡҡан һүҙлектәр исемлеген тәҡдим итәбеҙ.

### Аңлатмалы һәм синонимик һүҙлектәр.

Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты телселәре төҙөгән. *З.Ғ.Ураксин* редакцияһында (30 меңләп һүҙ). Өфө, 2005.

Аңлатмалы һүҙлек. Башланғыс синыфтар өсөн. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты телселәре төҙөгән (4 меңләп һүҙ). Өфө: Китап, 2005.

*Ураксин З.Ғ.* Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. 2-се баҫмаһы. Өфө: Китап, 2000.

### Орфографик һүҙлектәр.

*Ишмөхәмәтов З.Ҡ.*, *Суфьянова Н.Ф.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. Өфө: "Башҡортостан энциклопедияһы" нәшриәте, 2002.

### Диалектологик һүҙлектәр.

Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты телселәре төҙөгән. Өфө: Китап, 2002.

### Ономастик һүҙлектәр (урын-ер атамалары, кеше исемдәре).

Башҡортостан Республикаһының топонимдар һүҙлеге. Яуаплы ред.: *А.А.Камалов, Р.З.Шәкүров.* Өфө: Китап, 2002.

Русско-башкирский словарь-справочник личных имен, авторов и фамилий. Составители: *Ф.Г.Хисамитдинова, Р.И. Султанова.* Уфа, 2000.

Русско-башкирский словарь-справочник названий населенных пунктов Республики Башкортостан. Уфа, 2000.

*Күсимова Т.Х., Бикколова С.Ә.* Башҡорт исемдәре. Өфө: Китап, 2000.

*Тупеев С.Х.* Башкирский именник-справочник личных имен с написанием вариантов на русском и башкирском языках. Уфа, 2004.

**Мәктәп өсөн һүҙлектәр.**

*З.Г.Ураксин, Ю.З.Ураксин.* Краткий русско-башкирский словарь. Уфа: Китап, 2003.

Русско-башкирский учебный функционально-ситуативный словарь. Отв. ред.: *Т.А.Кильдебекова, М.Г.Усманова.* Уфа, 2004.

*Кильдибекова Т.А.* и др. Русско-башкирский учебный функционально-ситуативный словарь. Уфа, 2004.

*Усманова М.Ғ.* Башҡорт теленең ҡылым, синонимдар һүҙлеге. Өфө, 2000.

**Грамматик һүҙлектәр.**

*Уразбаева З.Г.* Словарь аффиксальных морфем башкирского языка. Уфа: Гилем, 2004.

*Әхтәмов М.Х.* Башҡорт теленең кире һүҙлеге (21 мең һүҙ). Өфө, 1999.

**Терминологик һүҙлектәр.**

*Галин С.Ә.* Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалар һүҙлеге. 2-се баҫмаһы. Өфө, 1990.

*Маматов Ә.Ф.* Башҡортостандағы умыртҡалы хайуандар исемдәренең урыҫса-башҡортса һәм башҡортса-урыҫса һүҙлеге (375 һүҙ). Өфө, 1999.

*Ҡыуандыҡов Ф.Ғ., Шаһимөхәмәтов Р.Б.* Урыҫса-башҡортса умартасылыҡ терминдары исемлеге (2500 һүҙ). Өфө, 1999.

*Баһауетдинова М.И.* Тыуған телем — байлығым: Башҡортса-русса этнографик терминдар һүҙлеге. Өфө, 2000.

*Ҡунафина Г.К., Ишкинина Т.Д.* Урыҫса-башҡортса ижтимағи-сәйәси терминдар һүҙлеге. Өфө, 2001.

*Мырҙакаев Ф.С.* Урыҫса-башҡортса ауыл хужалығы терминдары һүҙлеге. 2-се баҫма. Өфө: Китап, 2001.

*Зәйнуллина Г.Д.* Урыҫса-башҡортса, башҡортса-урыҫса умартасылыҡ һүҙлеге. Өфө: Китап, 2001.

*Сиразитдинов З.Ә., Ураксин З.Ғ.* Урыҫса-башҡортса һәм башҡортса-урыҫса архитектура-төҙөлөш терминдары һүҙлеге. Өфө: Река, 2004.

**Баҫылмаған һүҙлектәр (нәшриәттәргә әҙерләп тапшырылған).**

Урыҫса-башҡортса һүҙлек. 2 томда. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты телселәре төҙөгән (60 меңләп һүҙ).

*Зәйнуллина Г.Д.* Урыҫса-башҡортса физик культура һәм спорт терминдары һүҙлеге.

*Баһауетдинова Г.Н.* Урыҫса-башҡортса хәрби терминдар һүҙлеге.

*Суфьянова Н.Ф.* Урыҫса-башҡортса сауҙа эше терминдары һүҙлеге һәм уҡыу ҡулланмаһы.

*Һаҙыева Р.Х.* Урыҫса-башҡортса экология терминдары һүҙлеге.

*Сөләймәнов В.С.* Урыҫса-башҡортса астрономия терминдары һүҙлеге.